

# Дәрестәрҙә Федераль дәүләт стандарттары талаптарының үтәлеше

# Уҡытыу процесын йыһазландырыу:

•яҡшы йыһазландырылған кабинет;
•компьютер;
•интернет селтәре;
•мультимедия проекторы;
•электрон дәреслектәр һ.б.



# Заманса дәрес билдәләре

Уҡытыусы

- үҙенең һәм уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген алдан планлаштыра, маҡсат һәм бурыстарҙы аныҡ билдәләй;
- уҡыусыларҙы эшмәкәрлеккә йүнәлтә;

Уҡыусы

- үҙенә маҡсат ҡуя һәм бурыстар билдәләй;
- маҡсатҡа ирешеү сараларын проектлай;
- эш һөҙөмтәһен үҙе баһалай һәм эшмәкәрлегенә төҙәтмәләр индерә

# Заманса дәрестә бала нимәгә өйрәнә?

1. Үҙ аллы һайлай белергә
2. Үҙ алдына маҡсат ҡуйырға, ҡарар ҡабул итергә
3. Стандарт булмаған ситуацияларҙан үҙ аллы сығырға
4. Үҙен һәм эштәрен контролләргә
5. Үҙен һәм эштәрен баһаларға, кәрәк саҡта төҙәтмәләр индерергә
6. Башҡаларҙы тыңларға, аралашырға

Ял минуттары
Динамик паузалар
Тын алыу гимнастикаһы
Күҙҙәр өсөн гимнастика
Релаксация минуттары
Төрлө күнегеүҙәр һәм эштәр
Юмор, көләмәс
Спорт тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр
Тестар һ.б.





# Заманса дәрескә ҡылыҡһырлама

**ДӘРЕС**

**Ижади эшмәкәрлек, эмоционаллек**

**Шәхси-йүнәлтелгән, индивидуаль характерҙа**

**Уҡыусы компетентлығын формалаштырыу өсөн шарттар булыу**

**Дәрес үҙәгендә - уҡыусы**

**Практик эшмәкәрлек**

**Рефлексия**

* Дәрестең яңы структураһында түбәндәге этаптарҙы билдәләргә була:

* **Белем һәм оҫталыкты актуалләштереү;**

  **Проблема ҡуйыу;**

  **Гипотезалар тәкдим итеү;**

  **Проблеманы хәл итеү өсөн кәрәкле белемде эҙләү;**

  **Тәүге (беренсел) белемде нығытыу;**

  **Алған белемдең проект эшмәкәрлегендә сағылыуы.**

# * Предметты өйрәнеү һөҙөмтәләре:

* **Шәхсән һөҙөмтәләр**: уҡыусының һәр яҡлап үҫкән, үҙ аллы рәүештә белем алырға, камиллашырға әҙер буларак формалашыуы.
* **Метапредмет һөҙөмтәләр**: белем алыу нигеҙен тәшкил иткән төп компетенцияларға эйә булыу, предмет-ара төшөнсәләрҙе үҙләштереү.
* Яңы стандарттар буйынса уҡыусыларҙа лингвистик, аралашыу, этнокультура өлкәһенә ҡараған компетентлыҡ булдырыу талап ителә.
* **Предмет һөҙөмтәләре**: башҡорт теле программаһы буйынса билдәле бер белем һәм күнекмәләргә эйә булыу; ижади эшмәкәрлек тәжрибәһен, белем-күнекмәләрен ғәмәли файҙалана алыу.

**Универсаль уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәре дүрт блокка бүленә: шәхси, регулятив, танып белеү, коммуникатив**

* *Шәхси эшмәкәрлек* уҡыусының эске шәхси позицияһын, мәғәнәүи-ҡиммәтле йүнәлеш алыуын (әхлаҡи нормаларҙы белеү, үҙ ҡылыҡтарыңдың дөйөм ҡабул ителгән этик принциптар менән тап килеү - килмәүен билдәләй алыу, ҡылыҡтың әхлаҡи аспектын айырыу) һәм ижтимағи ролдәрҙә, шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙә дөрөҫ йүнәлеш алыуын тәьмин итә.
* *Регулятив (көйләүсе) универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә* уҡыу процесын һәм дәрестән тыш эшмәкәрлекте ойоштороу өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыусы эш төрҙәре ҡарай.
* *Танып белеү* блогына дөйөм уҡыу (өйрәнеү, белем алыу) эшмәкәрлеге, логик эшмәкәрлек, шулай уҡ проблеманы ҡуйыу һәм хәл итеү инә.
* *Коммуникатив эшмәкәрлек* социаль компетентлыҡты, аралашыусы һәм хеҙмәттәш партнерҙар позицияһын иҫәпкә ала, башҡаларҙы тыңлай һәм диалогка инә белеүҙе, проблемаларҙы коллектив менән хәл итеүҙә ҡатнашыуҙы, тиҫтерҙәрең һәм өлкәндәр менән продуктив хеҙмәттәшлек ойоштора белеүҙе тәьмин итә.



# Өй эштәренә талаптар

-проблемалы ситуациялар,
-эшлекле уйындар,
-конкурстар,
-ярыштар («кем тиҙерәк?, күберәк?, яҡшыраҡ?»),
-ижади эштәр (инсценировкалар, лингвистик әкиәттәр, йомаҡтар, рефераттар, проекттар, ребустар, схемалар),
-тестар,
-һорауҙар,
-төрлө биремдәр менән карточкалар (хаталарҙы төҙәтергә, төшөп ҡалған хәрефтәрҙе, тыныш билдәләрен ҡуйырға һ.б.)